# 9-сы класс уҡыусылары өсөн әсә теленән олимпиада һорауҙары

**1. Башҡорт теленә ҡәрҙәш булған телде билдәләгеҙ**:

а. Рус
б. Үзбәк
в. Немец

**2. Мәғәнәләренә ҡарап, һүҙҙәрҙе дөрөҫ урынлаштырығыҙ**:

1. Рецепт, аспирин, шприц — а. Диалект һүҙе
2. Юл башы, кеше башы, ер башы — б. Профессиональ һүҙ
3. Ағас еләге, әберсә — в. Күп мәғәнәле һүҙ

**3. Төп башҡорт һүҙен табығыҙ:**

а. Торба б. Самауыр в. Тау г. Диспетчер

**4.** “Иғтибарға алып, ҡабул ителә, ярашлы, ҡарар ителә, көн тәртибе, ҡарарҙы тормошҡа ашырыу, саралар күрергә кеүек һүҙҙәр ҡайһы стилдә йышыраҡ осрай?

А. Йәнле һөйләү стилендә
Б. Матур әҙәбиәт стилендә
В. Рәсми эш ҡағыҙҙары стилендә
Г. Фәнни стилдә
Д. Публицистик стилдә

**5. Башҡорт телендә ниндәй тел стилдәре бар?**

а. Йәнле һөйләү һәм рәсми стилдәр
б. Матур әҙәбиәт стиле генә
в. Йәнле һөйләү стиле, фәнни стиь, рәсми стиль, публицистик стиль, эш ҡағыҙҙары стиле

**6. Һөйләмдәрҙе аңлаткан мәғәнәләренә ҡарап урынлаштыр:**

1. Кешеләрҙең бер-береһе менән үҙ-ара аралашыу, фекер алышыу, теләктәрен сағылдырыу, тойғолар менән уртаҡлашыу сараһы
2. Кешеләр аралашыуының иң мөһим сараһы
3. Халыҡтың һүҙ оҫталары тарафынан эшкәртелгән, шымартылған һәм нормаға һалынған йәнле һөйләү теле
4. Хәҙерге әҙәби телдән айырылып торған һүҙҙәр йыйылмаһы

А. әҙәби тел Б. Тел В. Диалект

**7.** Диалектҡа ҡараған һөйләштәрҙең урынлашыу тәртибен асыҡла:

1. Балаҡатай, Мәсетле, Дыуан, Ҡыйғы, Салауат, Учалы, Әбйәлил райондары, Баймаҡ, Бөрйән райондарының төньяғы, Белорет районының төньяҡ-көнсығышы, Силәбе, Курган, Екатеринбург өлкәләрендәге башҡорттарҙың һөйләштәре.

2. Ейәнсура, Мәләүез, Баймаҡ райондарының көньяғы, Күгәрсен, Хәйбулла, Көйөргәҙе, Бөрйән, Ҡырмыҫҡалы, Белорет, Ишимбай, Ғафури, Нуриман райондарының көнбайышы, Федоровка, Стәрлебаш, Шишмә, Иглин райондары, Ауырғазы, Дәүләкән, Миәкә, Әлшәй, Бишбүләк, Нуриман райондарының көнбайышы.

Ырымбур өлкәһенең Александр, Гай, Красногвардейский, Ҡыуандыҡ, Новосергиевский, Октябрь, Переволоцк, Һарыҡташ, Төйләгән райондары.

Һамар өлкәһенең Больше-Черниговский, Больше-Глушицский, Һарытау өлкәһенең Перелюб һәм Пугачев райондарындағы Һайылмыш, Һаҡмар, Туҡ, Соран, Ырғыҙ, Кәрәлек, Кәмәлек буйында йәшәгән башҡорттарҙың һөйләше.

3. Башҡортостандың төнъяҡ-көнсығышындағы Ҡариҙелдең урта ағымында, Төй, Сөн, Ҡармасан, Сәрмәсән, Ағиҙелдең түбәнге ағымында, Танып йылғалары буйында урынлашҡан Ҡариҙел, Асҡын, Балтас, Тәтешле, Борай, Яңауыл, Краснокама, Дүртөйлө, Илеш, Туймазы, Татарстандың Аҙнаҡай, Аҡтаныш, Әгрез, Минзәлә, Мөслим, Пермь өлкәһенең Ҡуйыҙа, Уса, Пермь, Чернушки һәм Барҙым райондарында йәшәгән башҡорттар һөйләше.

А. Көньяҡ диалект б. Көнбайыш диалект в. Көнсығыш диалект

**8. Башҡорт әҙәби телендәге стилдәрҙе дөрөҫлә:**

1. Телмәрҙә, үҙ-ара әңгәмәлә сағылған стиль
2. Күркәм әҫәрҙәр ижад иткәндә ҡулланылған стиль
3. Ниндәй ҙә булһа бер китапҡа, мәҡәләгә һәм башҡа материалға уның йөкмәткеһе, идея-йүнәлеше, тәғәйенләнеше, уның формаһы тураһында дөйөмләштерелгән характеристика биреү

4. Фәнни эҙләнеүҙәрҙең һөҙөмтәһен аңлатыу, тасуирлау өсөн ҡулланылған стиль
5. Ниндәй ҙә булһа бер фундаменталь мәсьәлә, техника, мәҙәниәт буйынса шул фәндәрҙең береһенән дә белгес булмаған киң масса уҡыусылар өсөн еңел һәм аңлайышлы тел һәм һөйләмдәр менән яҙылған хеҙмәт
6. Халыҡ араһында агитация эшендә ҡулланыла. Гәзит-журнал мәҡәләләре, әҙәби тәнҡит, төрлө мөрәжәғәттәр, белдереүҙәр, ижтимағи-сәйәси брошюралар, төрлө темаларға очерктар, фельетондар һәм памфлеттар яҙыуҙы ҡулланылған стиль.
7. Яҙыу-һыҙыу эштәрендә, рәсми аралашыуҙа ҡулланыла. Ул стиль кешеләрҙең төрлө дәүләт учреждениелары менән, шулай уҡ дәүләт учреждениеларының үҙ-ара аралашыуҙарын сағылдыра.
8. Боронғо замандарҙа уҡ айырым кешеләрҙең, дәүләт эшмәкәрҙәренең бер-береһе менән мөнәсәбәттәре махсус яҙышыу аша барыу
9. Телмәрҙә һәр береһенең үҙенә генә ҡараған үҙенсәлекле билдәләре һәм һыҙаттары буйынса айырым бер функция үтәп йөрөүсе стилдәр

А. Функциональ стилдәр Б. Аннотация
В. Хаттар стиле Г. Фәнни стиль
Д. Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле Е. Матур әҙәбиәт стиле
Ж. Фәнни-популяр стиль З. Йәнле һөйләү стиле
И. Публицистик стиль

**9. Тел ғилеменең ниндәй бүлеге телмәр өндәрен, уларҙың бүленешен, телмәрҙә үҙгәрешен өйрәнә?**

А. Синтаксис б. Морфология в. Фонетика г. Орфография

**10. Тел ғилеменең ниндәй бүлеге һүҙ төркөмдәрен, һүҙ үҙгәрешен өйрәнә?**

А. Синтаксис б. Орфография в. Морфология

**9-сы класс уҡыусылары өсөн туған әҙәбиәттән олимпиада һорауҙары**

**1. Түбәндәге образдарҙы үҙ урынына ҡуйып сыҡ:**

1. Йәнбирҙе, Йәнбикә, Самрау батша, Әзрәкә, Һомай, Ҡатил;
2. Туҡтамыш хан, Аҡһаҡ Тимер, Сәләхи бай, Һабрау;
3. Тарауыл ҡарт, Һәүбән, Аҡбуҙат, Шүлгән, Һомай, Нәркәс;

а) “Аҡбуҙат" эпосы;
б) "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосы;
в) "Урал батыр" эпосы?

**2. Ҡобайырҙар кем тарафынан һәм ҡайҙа яҙып алынған:**

1. "Урал батыр";

2. "Аҡбуҙат";

а) Башҡортостандың Көйөргәҙе районындағы Бабалар ауылында йәшәгән Ғиниәт сәсән Биҡҡужиндан Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан 1917 йылда яҙып алынған;

б) Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районындағы Иҙрис һәм Бәләкәй Этҡол ауылдарында йәшәгән Ғәбит һәм Хәмит исемле атаҡлы ҡурайсыларҙан халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыусы Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан 1910 йылда яҙып алынған?

**3. Традицион жанрҙарҙы дөрөҫлә:**

1. Төрлө им-том, ваҡыт, миҙгел, туй, йола поэзияһы;
2. Легенда, риүәйәттәр, көләмәстәр. Хайуандар, батырҙар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәр, тормош-көнкүреш әкиәттәре;
3. ҡобайырҙар, батырҙар, тормош-көнкүреш тураһындағы иртәктәр.

Әйтештәр;

4. Тарихи, тормош-көнкүреш, мөхәббәт йырҙары. Таҡмаҡтар. Исемһеҙ йырҙар.

5. Мөнәжәт, тарихи бәйеттәр, тормош-көнкүреш бәйеттәре;

6. Мәҡәлдәр, һынамыштар, әйтемдәр, йомаҡтар;

7. Уйындар. Балалар фольклоры;

а) героик эпос;
б) бәйеттәр;
в) әкиәт эпосы;
г) йола поэзияһы;
ғ) афористик ижад;
д) йыр поэзияһы;
е) халыҡ театры?

**4. Ҡобайырҙарҙың төркөмдәрен тап:**

1. һәр ырыуҙың сәсәне үҙ ырыуын, үҙҙәре йәшәгән төбәкте маҡтап ҡобайыр әйткән. Патриотик тойғоло, тыуған ергә, тыуған илгә һөйөү тойғоларын, ватансылыҡ тойғоһо, батырлыҡ тойғоһо менән бергә үрелә килә;

2. ҡобайырҙарҙың үҙәгендә тыуған илде дошмандан һаҡлар батырҙар образы тора;

3. Ололар һүҙе - итеп, йешене нисек булырға, яҡшы йәшәргә, кешеләргә изгелек күрһәтергә, алама, яман ҡылыҡтарҙы булдырмаҫҡа өндәгән ҡобайыр;

а) батырҙар тураһындағы ҡобайырҙар;
б) тормош-көнкүреш (әҙәп-әхлаҡ) ҡобайырҙары;
в) тыуған ил тураһындағы ҡобайырҙар?

**5. Түбәндәге образдар ниндәй әҫәрҙән:**

1. Яҡуп, Зөләйха, Таймус.
2. Ҡарасәс, Зәйтүн, Искәндәр, Сөләймән, Ҡаҙарман, Ғәли.
3. Бурнаҡ бей, Йәдкәр мырҙа, Тәтегәс бей, Аҙнай баба, Илсекәй Тимер баба, Ҡармыш баба.
4. Мөйтән, Шәғәли, Беҙек бей, Йөрәк бей, Урал бей, Толобай

А. Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе Б. Юрматы ырыуы шәжәрәһе
В. “Буҙъегет” поэмаһы Г. “Ҡисса –и Йософ” поэмаһы

**6. Салауат образы сәнғәттә:**

1. “Салауат” операһының авторы а. З. Исмәғилев
2. Атаҡлы һыбай һәйкәлен төҙөүсе скульптор б. Т. Нечаева
3. Бюстын яһаусы скульптор в. С.Тавасиев
4. Портретын яһаусы рәссамдар г. Р. Мостафин, Ишбулатов, Ә.Лотфуллин

**7. Башҡорт халҡының томошоноң сағылышын күрһәткән авторҙарҙың әҫәрҙәрен дөрөҫлә:**

1. А.С.Пушкин а. “Һүнә барған Башҡортостан”, “Әмилә”
2. Л.Толстой б. “Телһеҙ”
3. М. Салтыков-Щедрин в. “Башҡорт бөтә”
4. Г.Успенский г. “Сит илдәрҙә”
5. М.Горький д. “Ильяс”
6. Н.Крашенников е. “Капитан ҡыҙы”

**8. Әҫәрҙәрҙең авторҙарын дөрөҫлә:**

1. “Урыным – зиндан...”, “Мәжлесенә ҡарай ғына”, “Инсафлыҡ”
2. “Йомран иле”, “Бөйөк шағир А.Пушкин”, “Башҡорттар”
3. “Әсмә”
4. “Башҡорт ағаларыма хат”, “Дим буйы”, “Ҡитға”

А. Р.Фәхретдинов в. М.Аҡмулла
Б. С.Яҡшығолов г. М.Өмөтбаев

**9. Түбәндәге образдарҙы дөрөҫ урынлаштыр:**

1. Шәкерт, Сәлимә, Фараби, Сәғди, Хафиз, Фирҙәүес
2. Ғәббәс мулла, Ғәйшә, Зәйнәп, Йософ, Ғәли

А. “Әсмә” Б. “Сәлимә”

**10. Аңлаткан мәғәнәләренә ҡарап, яҙыусыларҙы тап:**

1. Әҫәрҙәрендә халыҡты мәғрифәткә өндәүсе, феодаль иҫкелеккә, дини фанатизмға ҡаршы көрәш, халыҡ педагогикаһын сағылдырыусы, поэтикаһында башҡорт, ҡаҙаҡ фольклоры традицияларын дауам итеүсе сәсән телле шағир.
2. Имам, ҡазый, мөфтөй, журналист. Балалар һәм ололар өсөн нәсихәт, ғаилә тәрбиәһе, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләренә арналған йыйынтыҡ авторы.
3. Мәғрифәтсе һәм шағир. Рус телен һәм мәҙәниәтен ныҡлап үҙләштергән эшмәкәр. Башҡортостандың тарихы, этнографияһы, фольклоры буйынса хеҙмәт авторы.

а) Р.Фәхретдинов. б) М. Өмөтбаев в) М.Аҡмулла.

**10 класс уҡыусылары өсөн әсә теленән олимпиада һорауҙары:**

**1. Башҡорт телендә һуҙынҡы өндәр һаны:**

А. 13 Б. 10 В. 12

**2. Шиғырҙағы күсмә мәғәнәләге һүҙҙәр нисек атала?**

Йөрәк әгәр ярһыу толпар булһа,
Ауыҙлыҡлар алтын аҡыл бар.
Ә елергә инде ирек ҡуйғас,
Ары торһон алтын аҡылдар!

а) Сағыштырыу б) Тасуирлау в) Метафора

**3. Яуаптарын тап**:

1. үҙгәртеүсе ялғау -
2. яһаусы ялғау -

А. үҙҙең тамырына, нигеҙенә ҡушылып, уның лексик мәғәнәһен үҙгәртәләр
Б. Яңы лексик мәғәнәле һүҙ яһайҙар
В. Һүҙҙең тамырына, нигеҙенә ҡушылып, уның лексик мәғәнәһенә тәьҫир итмәй
Г. Грамматик мәғәнәһен генә үҙгәртә
Д. Һөйләм эсендә башҡа һүҙҙәргә бәйләү вазифаһын башҡара.

**4. Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын билдәлә:**

1. Ике йәки бер нисә һүҙҙән тороп, һуңғы һүҙендә эйәлек ялғауы булған ҡушма һүҙҙәр.
2. Бәйләү юлы менән яһалған ҡушма һүҙҙәр
3. Тәүге һүҙе аныҡлаусы мәғәнәһен һаҡлағанда
4. Һүҙҙәрҙе парлау
5. Һүҙҙәрҙе ҡабатлау

А. Һыҙыҡса аша яҙыла
Б. Айырым яҙыла
В. Ҡушылып яҙыла

**5. Яуаптарҙы дөрөçлә:**

1. исем 2. бәйләүес 3. һан 4. теркәүес 5. сифат 6. киҫәксә 7. алмаш 8. ҡылым 9. ымлыҡ 10. рәүеш

А. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре -
Б. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре -

**6. Исемдәрҙең нимә менән үҙгәреүен билдәлә:**

а. Эйәлек һәм хәбәрлек заты б. Заман в. Һан г. Дәрәжә д. Килеш

**7. Миҫалдарҙы үҙ урындарына урынлаштыр:**

1. Көн итеү, яҙып ултыра, һөйләй торғайны а. Тамыр ҡылымдар

2. Эшлә, аҡла, күбәй б. Яһалма һүҙҙәр
3. Уҡы, яҙ, ҡайт в. Ҡушма ҡылымдар

**8. Миҫалдарҙы үҙ урынына яҙ:**

1. Килегеҙ, йөрөмәгеҙ, күрәшһен, әйтсе
2. Барасаҡ, уйлай торған булған, ҡыуандым
3. Килһәм, тотһаң, уйлаһағыҙ.
4. Эшләйһем бар, ҡайтҡыһы килә, килмәкселәр.

А. Шарт һөйкәлеше В. Теләк һөйкәлеше
Б. Бойороҡ һөйкәлеше Г. Хәбәр һөйкәлеше

**9. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ урынлаштыр:**

1. Фразеологик берәмектәр
2. Диалект һүҙҙәр -
3. Неологизм -
4. Иҫкергән һүҙҙәр -

а. Мыҫҡал, көйәрмән, саҡрым, әсмүхә
б. Факс, көйәрмән, йәнһүрәт.
в. Нота, пианино, бинт, йод
г. Ҡайыш ятышы бушаны, теле телгә йоҡмай, ерек тәртәһе ҡыйшайған

**10. Сифаттарҙы дәрәжәләре буйынса урынлаштыр:**

1. Аҡ, тоҙло, әсе, тәрән, хәйләкәр
2. Бейегерәк, ҡыҙылыраҡ, өлгөрөрәк, ҡуйыраҡ, йәмлерәк
3. Ап-аҡ, йәм-йәшел, ифрат ҙур, иң яҡшы, бик һәйбәт
4. Ҡыҙғылт, һорғолт, аҡһыл, күгелйем, әскелтем.

10 класс уҡыусылары өсөн туған әҙәбиәттән олимпиада һорауҙары

**1. Түбәндәге шиғырҙарҙың авторҙарын дөрөҫлә:**

1. “Башҡортостан”, “Салауат батыр”, “Ғәскәр маршы”, “Ҡурайҡайға”.
2. “Октябрь”, “Ирек тауышы”
3. “Октябрь еле”
4. “Ҡыҙыл байраҡ”
5. “Ант”

а. Ш.Фидаи
б. Ш.Бабич
в. Д.Юлтый

**2. Билдәләмә менән яуаптарҙы тап килтерегеҙ:**

1. Шиғырҙарында комсомолецтар образын сағылдырыусы яҙыусылар;
2. Прозаның нығыуына булышлыҡ итеүсе, ижадтарында яңы йәмғиәт төҙөүсе йәштәр, комсомолецтар, большевиктар тураһында яҙыусылар;
3. Башҡорт совет драматургияһын тыуҙырыуға булышлыҡ итеүсе яҙыусылар;
4. Башҡорт сәхнәһендә фольклор-этнографик драма әҫәрҙәрен тыуҙырыусылар:

а) М. Ғафури, А. Таһиров, Д. Юлтый;
б) М. Ғафури, Ғ. Дәүләтшин, Ғ. Хәйри;
в) А. Таһиров, Ғ. Дәүләтшин, Ғ. Хәйри;
г) М. Буранғолов, Х. Ғәбитов, Х. Ибраһимов;
ғ) М. Ғафури, С. Ҡудаш;
д) Б. Ишемғол, Ғ. Хәйри

**3. Д. Юлтыйҙың тыуған ауылының исемен дөрөҫлә:**

1. Ырымбур әлкәһенең Красногвардейский районы Үрге Ильяс ауылы;
2. Ырымбур губернаһындағы Туҡ йылғаһы буйында ултырған Юлтый ауылы;
3. Һамар өлкәһе Хәсән ауылы?

**4. Түбәндә Д.Юлтыйҙың ниндәй драмалары тураһында һүҙ бара:**

1. Туҡсоран буйҙарында булған бер хәл-ваҡиғаға ҡоролған драма;
2. Тарихи драмалар;
3. "Үмәр" исемле легендалы халыҡ йыры сюжетына таянып ижад ителгән драма;
4. Был драмала алынған герой-персонаждар барыһы ла тиерлек ысынбарлыҡтағы тарихи шәхестәр;
5. Тарихи-көнкүреш драмаһы;

а) "Салауат һәм Пугачев";
б) "Ҡарағол";
в) "Урланған Көнһылыу";
г) "Аралбайҙар";
ғ) "Маҡтымһылыу"?

**5. "Ҡарағол " драмаһындағы монологтарҙы дөрөҫлә:**

1. "Бына, ҡыҙ. Бына ҡыҙ тиһәң дә ярай!.. Күрәһең, уға хәҙер дәрт инген. Ул әллә ҡайҙарға, тау башына ҡарап, әллә ниҙәр һөйләгән була бит әле! Бына мин шундай ҡыҙҙы яратам да инде!";
2. "Бына нисек улар йөрәкте ағыулайҙар бит! Бына нисек улар һинең намыҫыңдан көләләр бит! Ишмырҙа кантон үҙе талағаны, йортто хурлағаны етмәгән, Әпкәләй кеүек шайтан шәүләләрен өҫкә ебәрә бит! Быға нисек итеп түҙеп торорға?";
3. "Бөгөн Һөйөндөктәр киләләр. Уны күреү әсән минең йөрәгем шул тиклем ярһый! Бына, ул ат сапкан кеүек тибә! Мин уны шул тиклем яратам!";
4. "Улар ҙа беҙҙең кеүек үк ҡыҫылалар, иҙеләләр, хур ителәләр. Уларҙа ла ирек теләгән яҡшы йөрәк бар. Бөгөн улар миңә шул тиклем яҡындар,

туғандар! Үҙемдең крәҫтиәндәрем кеүек туғандар!";

а. Кузьма б. Һөйөндөк в. Ҡарағол г. Вася д. Әпкәләй е. Таңһылыу

**6. "Ҡан" романындағы образдар (5 ОБРАЗ):**

А. Вася Б. Томенко В. Булат Г. Ҡәҙерша Д. Байғужа Е. Аҫылбай

Ж. Новиков З. Индерил И. Ҡарағол

**7. Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуған йылы:**

А. 1888 йыл 15 декабрь, Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе

Б. 1890 йыл 10 (22) декабрь, элекке Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Көҙән ауылы.

В. 1902 йыл 10 (22) декабрь, Ишембай районы Көҙән ауылы

**8. З.Вәлидиҙең Ҡазанда баҫылып сыҡҡан беренсе китабы нисек атала?**

А. "Төрөк тарихы" Б. "Төрөк-татар тарихы"

В. "Татар тарихы" Г. "Төрөк һәм татар тарихы"

**9. М.Буранғоловтоң драма исемдәрен дөрөҫ ҡуй:**

1. "Ҡараһаҡал"; 3. "Туҡтар менән Гөлнур";
2. "Иҙеүкәй менән Мораҙым"; 4. "Мәргән";

а) Һуң, ҡасанға тиклем халыҡ түҙер.
Өҙлөкһөҙ бит малы талана...
Ҡайҙа ғына барма, бары илай,
Күҙ йәше менән һыҡтап, зарлана!

б) Уралда үҫкән һыным бар,
Урал тигән илем бар!
Сыңғыҙҙы ла, яуын да
Барын күргән башым бар!

в) Сәйет, Күсем, Аҡайҙар,
Барыһы ла илдән юғалды.
Ил күкрәген ҡан баҫып,
Ҡайғы уты тоҡанды?

**10. "Ғәйнан Хәйри. Тормошо һәм ижад юлы"**
монографияһын кем яҙған:

1. Ғ. Хөсәйенов; 2. Т. Килмөхәмәтов; 3. С. Сафуанов?

**11. 30-сы йылдар поэзияһының тематикаһын урынлаштыр:**

1. Яңы кеше образын кәүҙәләндергән поэмалар;
2. Шиғри романдың авторы;
3. Лирик поэзияһын үҫтереүселәр;
4. Тәбиғәт һәм мөхәббәт лирикаһы;
5. Тормош хаҡында тәрән уйланыуҙар менән тулы фәлсәфәүи шиғырҙар, сюжеттар, романтик балладалар;

а) С. Ҡудаш "Ҡушҡайын";
б) Б. Ишемғол "Ватан";
в) Д.Юлтый "Мәйсәрә", "Айһылыу" ,Б.Ишемғол "Тракторсы Айһылыу", С. Ҡудаш "Хат", Т. Йәнәби "Еңеүселәр иле";
г) М. Хәй, Ғ. Сәләм, Б. Бикбай;
ғ) С. Кулибай, Ҡ. Даян;
д) С. Ҡудаш, Ғ. Әмири, Ҡ. Даян?

**12. Аңлатҡан мәғәнәләренә ҡарап, һ.Дәүләтшинаның әҫәрҙәренең исемен яҙ:**

1. 30-сы йылдар башҡорт ауылы ҡатын-ҡыҙҙарының, яңы тормош төҙөүселәрҙең типик вәкилен күрһәтеү;
2. Тарихи үҙгәрештәр, ҡатмарлы ижтимағи-сәйәси көрәш һөҙөмтәһен күрһәтеү;

а)"Ырғыҙ" романы;
б)"Һылыуҡай-пионерка" хикәйәһе;
в)"Айбикә" повесы?

**13. Түбәндәге әҫәрҙәрҙең авторҙарын дөрөҫлә:**

1. "Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт"; а) һ. Дәүләтшина;
2. "Бала"; б)И. Насыри;
3. "Еңелгән ятыу"; в) С. Мифтахов;

г) Ғ. Сәләм?

**14. Түбәндәге шиғырҙарҙың авторын тап:**

1. "Тыуған илем әсән!", "Үс ал, патриот!"; а) Б. Бикбай;
2. "Ҡоралға, иптәштәр!"; б) М. Харис;
3. "Хат", "Онотмаһын мине, Тыуған ил". в) Р. Ниғмәти?

**15. Түбәндәге өҙөктәр Р.Ниғмәтиҙең ниндәй әҫәрҙәренән:**

1. Бер һелкенде Урал
Ҡарт айыуҙар
Үкереп торҙо ятҡан еренән,
Арғымаҡтар кешнәп ебәрҙеләр,
Ҡандан ҡылыс һурҙылар егеттәр.
2. Һәм тормошто данлап,
тағы һайрар,
Тағы йырлар әле һандуғас.
Һандуғас! Һандуғас!
3. Водолаздар,
Волга төбөнә төшөп,
Һыу аҫтында бетон һалғандар,
Ҡуйы урман күтәрелеп сыҡҡан,
Йәйрәп ятҡан ҡола яланда.

а)"Һинең кәләшеңдең хаттары";
б) "Йәмле Ағиҙел буйҙары";
г) "Герой тураһында поэма";
ғ) "Һаҡмар ҡыҙы"?
в) "Үлтер улым, фашисты!";

**16. Б.Бикбайҙың тыуған йылын һәм урынын дөрөҫлә:**

а. 1927 йыл 22 март Көйөргәҙе районы Ҡалта ауылы;
б. 1909 йылдың 19 ғинуары Көйөргәҙе районы Ҡалта ауылы;
в. 1937 йылдың 2 июне Көйөргәҙе районы Яманғол ауылы?

**17. Түбәндәге өҙөктәрҙе З.Биишева трилогияһының исемдәре буйынса дөрөҫлә:**

1. Ауылда бөтә кеше уны яратып та, мәҙәк итеп тә Сыуаҡай Әбей тип йөрөтә. Күҙгә сыуаҡ кеүек яҡты күләс йөҙлө, йомшаҡ, яғымлы һүҙле, изгелексән, яҡшы күңелле был әбейгә Сыуаҡай тигән исем ғәжәп йәтеш тура килеп тора;

2. - Бин, улым, хәҙер үк туры атты ҡырҙан эҙләп алып ҡайт. Күрше-күлән күҙенә бик үк салынмаҫҡа тырыш. Арт ҡапҡаны асып кит. Шунан ҡайтырһың!

- Бөтәһен дә һин әйткәнсә эшләрмен! - тип, Байрас командирҙың бойороғон үтәргә йыйынған һалдат шикелле, өҙә баҫып өйҙән сығып китте;

3. - Атайҙар иҫтәлеге алдында йөҙ ҡыҙармаҫлыҡ итеп йәшәргә тырышырбыҙ. Ҡараңғынан яҡтыға табан оло юлға сыҡҡанбыҙ икән, түбәгә таш яуһа ла, кирегә боролоу булмаҫ. Шулай бит, Емеш;

а) "Оло Эйек буйында";
б) "Кәмһетелгәндәр";
в) "Яҡтыға"?

## 11-се класс уҡыусылары өсөн әсә теленән олимпиада һорауҙары

**1. Рәүештәрҙе төркөмсәләренә ярашлы урынлаштыр:**

1. Яҡын, алыҫ, үрле-түбәнле — а. Төп рәүештәр
2. Байтаҡ, беренсенән, бер юлы — б. Ваҡыт рәүештәре
3. Хәҙер, иртән, яҙын — в. Урын рәүештәре
4. Минеңсә, китапса, яҙғанса — г. Оҡшатыу рәүештәре
5. Бушҡа, юрый, юрамал — ғ. Күләм-дәрәжә рәүештәре
6. Шәп, баш түбән, ашыҡ-бошоҡ — д. Сәбәп-маҡсат рәүештәре

**2. Теркәүестәрҙе үҙ урынына ҡуй:**

1. һәм, ла-лә, йәғни, хатта, шулай ҙа, әле, берсә
2. Сөнки, шуға ла, шул арҡала, әгәр, гүйә

а. Эйәртеү теркәүестәре — б. Теҙеү теркәүестәре

**3. Бәйләүестәрҙе бүленеше буйынса дөрөҫлә:**

1. һымаҡ, арҡыры, буйы, арҡаһында, үтә
2. хәтлем, ҡаршы, ҡарап, ҡәҙәре, ҡарата
3. бүтән, борон, башлап, алып

А. Төбәү һәм төп килеште талап итеүсе бәйләүестәр
Б. Сығанаҡ килеште талап итеүсе бәйләүестәр
В. Төп йәки эйәлек килеште талап итеүсе бәйләүестәр

**4. Киҫәксәләрҙе бүленеше буйынса ҡуйып сыҡ:**

1. ла-лә, дә-дә, таһа-тәһә, табаһа, бит, тағы
2. тыр-тер, дыр-дер, ҙыр-ҙер, лыр-лер
3. мы-ме, мы ни, ни-ме ни, мы икәнме ни

а. Икеләнеү киҫәксәләре
б. Һорау киҫәксәләре
в. Көсәйтеү, раҫлау киҫәксәләре

**5. Ымлыҡтар яһала торған һүҙ төркөмдәрен тап:**

а. Исем б. Ҡылым в. Сифат г. Һан

**6. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәрен асыҡла:**

1. һөйләмдә пердметтың билдәһен, эйәһен, иҫәбен йә күләмен белдереп, ниндәй? Ҡайһы? Ҡайҙағы?, кемдең?, нисә? Һорауҙарына яуап була
2. Предметтың билдәһен белдереү менән генә сикләнмәй, атамаһына әйләнгән һүҙҙәр
3. Айырым һорауҙары булмай
4. һөйләмдең хәбәренә бәйләнеп, уның мәғәнәһен асыҡлап, тултырып килеүсе һүҙҙәр
5. һөйләмдә эш-хәлдең эшләнеү рәүешен, ваҡытын, урынын, сәбәбен, маҡсатын һәм ниндәй шарттарҙа эшләнеүен белдергән эйәрсән киҫәк

а. Тултырыусы б. өҫтәлмәлек в. Хәл г. Аныҡлаусы

**7. Ҡушма һөйләмде күрһәтегеҙ:**

1. Таңсулпандың йәш йөрәгендә нәфрәт уты ла, мөхәббәт ялҡыны ла етерлек ине.
2. Шаҡман атын Ирәктең төп төйәгенә, Ыҡ аръяғына табан борҙо.
3. Фатиманы юрғанға уранылар ҙа санаға ултырттылар.
4. Ямғыр күп яуһа, ер күгәрер.
5. Талҡаҫ буйына һоҡланып бөткөһөҙ.

**8. Ҡыш көнө атайым икмәкте бик аҙ ғына, телемләп кенә, бирә.**

А. Тиң эйәләр эргәһендә
Б. өҫтәлмәлекте айырыу өсөн
В. Айырымланған хәл эргәһендә
Г. Инеш һүҙ эргәһендә
Д. өндәш һүҙ эргәһендә

**9. Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.** ***Етем ҡайҙа – һүҙ шунда.***

а. Эйә һөйләм б. Хәбәр һөйләм в. Ваҡыт һөйләм
г. Тултырыусы һөйләм д. Урын һөйләм.

**10.** ***Атты һәр егет ярата инде ул.*** Аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй килештә?

а. Төп килеш б. Эйәлек килеш в. Төбәү килеш г. Төшөм килеш д. Сығанаҡ килеш

## 11-се класс укыусылары өсөн туған әҙәбиәттән олимпиада һорауҙары

**1. М. Кәримдең тыуған йылын дөрөҫлә:**

1. 1894 йылдың 3 октябрендә Шишмә районы Келәш ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуа;
2. 1919 йылдың 20 октябрендә Шишмә районы Келәш ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуа;
3. 1923 йылдың 15 октябрендә Шишмә районының Иҫке Муса ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа?

**2. Түбәндәге образдар ниндәй әҫәрҙәренән:**

1. Лирик герой, Якуп, ҡатын;
2. Әсғәт, Талип, Аҡйондоҙ;
3. Аҡйегет, Зөбәржәт, Шәфәҡ, Дәрүиш, Ялсығол;

а) «Яңғыҙ ҡатын»;
б) "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ";
в)"Ҡыҙ урлау";
г) "Ҡара һыуҙар"
д) “Ай тотолған төндә”

**3. Түбәндәге аңлатмалар буйынса Муса Ғәлиҙең әҫәрҙәрен дөрөҫлә:**

1. Сит илдәрҙең хеҙмәтсән халҡына өндәшеүе, уларға дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һүҙҙәрен еткереүе;
2. Йыһан хаҡында, космосты яулау менән бәйле романтик әҫәре;
3. Йәшәү һәм көрәш, һуғыш һәм тыныслыҡ темалары әҫәрҙең төп проблемаһы итеп алынған поэмаһы. Шоңҡар образы;

а) "Ҡыҙыл үләндәр"; в) "Ҡояш еле";
б) "Тауҙар саҡыра"; г) "Диңгеҙҙәр аша һөйләшеү"?

**4. Ф. Тутыҙбаеваның поэмаларын дөрөҫ урынлаштыр:**

1. Уралда атом бомбаһы шартлатылыуы, Силәбе башҡорттарының фажиғә кисереүҙәрен күрһәтеүсе поэма;
2. Ш. Бабичка арналған поэма;
3. Салауатҡа арналған поэма;

а) "Яуап көнө"; б)"Уян, халҡым!"; в)"Ҡыңғырау"; г) "Тәүбә"?

***5.* Тимер Йосоповтоң тәүге китабын билдәлә:**

а. "Йылдар сылбыры"; б. "Алтын туҙан"; в. "Икмәк еҫе

**6. Түбәндәге әҫәрҙәрҙе аңлатмаларға ярашлы билдәлә:**

1. Э. Хәкимов "Бауыр ҡумта", 1980; "Думбыра сыңы", 1983;
2. Я. Хамматов "Төнъяҡ амурҙары", 1982-1985;

а) Башҡорт яугирҙарының 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыу ваҡиғаларына арналған роман;
б) Авторҙар фиҙаҡәрлеге, тикшереүсәнлеге, эҙләнеү оҫталығы арҡаһында тыуған әҫәр;
в) Башҡорт ырыуҙарының дәүләт булып ойошорға ынтылышын, Алтын Урҙа менән Нуғай ханлығы иҙеүенә ҡаршы көрәште һүрәтләү?

**7. Яныбай Хамматовтьщленталогияһын дөрөҫлә (1-5):**

а)"Йәшенле йәй";
б)"Руда";
в)"Аҡман-тоҡман";
г) "Бөртөкләп йыйыла алтын";
ғ) "Юрғашты"?

**8. Ғ.Шафиҡовтың түбәндәге публицистик очерктарында кемдәр тураһында һүҙ бара:**

1. "Замандың намыҫы һәм ҡорбандары" ("Жертва и совесть эпохи");

2. "Ул халыҡ хәтерен һаҡланы" ("Он сберег память народную");
3. "Ҡаршы тороу" ("Противостояние");
4. "Ырғыҙ ҡыҙы" ("Дочь Иргиза");
5. "Көрәш әсән тыуған" ("Для ратных дел рожденный");

а) З. Вәлиди;
б) Һ. Дәүләтшина;
в) М. Муртазин;
г) М. Буранғолов;
ғ) Т. Йәнәби;
д) Д. Юлтый?

**9. Әҙәбиәт ғилеме һәм тәнҡит өлкәһендә эшләгән әҙиптәр:**

А. И. Насыри, А. Таһиров, С. Ҡудаш;
Б. Ә. Харисов, Р. Байымов, Ә. Вахитов, Ғ. Хөсәйенов, М. Кәрим, Р. Солтангәрәев;
В. Ә. Харисов, К.Әхмәтйәнов, Ә. Вахитов, Ғ.Хөсәйенов, М. Ғәйнуллин, Р. Байымов?

**10. Түбәндәге юлдар Р.Ғариповтың ниндәй әҫәрҙәренән:**

1. Ирек һөйгән әсән бығауланып
Ҡарт Уралдың ҡая ташына,
Ни генә һуң кисермәгән халҡым,
Ни үтмәгән уның башынан!
2. Илкәйенең хөр көндәрен даулап,
Ирек, ырыҫ, хаҡлыҡ хаҡына
Сал быуаттар аша сапты, сапты,
Сапты һаман ғәзиз халҡына.
3. Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар,
Иркең барҙа күркең бар,
Ил биҙәргә дәртең бар.

а) "Уйҙарым";
б) "Аманат";
в) "Салауат батыр";
г) "Урал йөрәге"?

**11. Аңлаткан мәғәнәләренә ҡарап, Р.Ғариповтың әҫәрҙәрен урынлаштыр:**

1. Шәхес культы осорона бағышланған поэмаһы;
2. Закон, яуызлыҡ, ғәҙелһеҙлектәр менән шағир килешеп йәшәй алмай, уларға ҡаршы көрәшергә сығыуы тураһындағы монологы;
3. Мәңгелеккә таш төрмәгә ябылған яусыл тотҡон тураһындағы әҫәре;

а) "Дон-Кихот";
б) "Интегралдар поэмаһы";
в) "Табыныу'";
г) "Батырша"?

**12. Түбәндәге образдар Ә.Хәкимовтың ниндәй әҫәрҙәренән:**

1. Зөфәр Богданов, Хәҙисә Барласова, Искәндәр Мораҙымов, Сәләхетдин, Фазыл, Бураншин;
2. Нурислам, Мәҙинә, Юныс Шәрәй, Эниф Ҡәйүм;

а) "Дауылдан ҡотолоу юҡ";
б) "Өйөрмә";
в) "Ҡош юлы"?

**13. Аңлаткан мәғәнәләргә ҡарап, Ғ.Хөсәйенов әҫәрҙәренең исемдәрен яҙ:**

1. 1704-1711 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәксеһе, Петр I батша ҡулы аҫтына ике тапҡыр Азов походында ҡатнашҡан яугир тураһындағы әҫәре;
2. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының батыры Пугачев полководецтарының береһе тураһындағы әҫәре;
3. Ғәйнә башҡорттары араһынан сыҡҡан мәғдән эҙләп табыусы, шуларҙы сығарыусы тураһындағы әҫәре;

а) "Пугачев фельдмаршалы";
б) "Рудасы Исмәғил Тасим улы";
в) "Алдар батыр ҡиссаһы";
г) "Ҡанлы илле биш"?

**14. Р.Бикбаевтың тыуған йылын һәм урынын дөрөҫлә:**

А. 1924 йылдың 10 октябрендә Ырымбур әлкәһе Красногвардейский районы Иҫке Юлдаш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған;

Б. 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур әлкәһе Покровка районында Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған;

В.1932 йылдың 3 декабрендә Ырымбур әлкәһенең Сәнкем-Биктимер ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған?